# *Башланғыс кластарҙа һорау һәм хәбәр һөйләмдәр өйрәнеү*

***Методик кәңәштәр***

*Кәримова Г.Я, Туймазы педагогия колледжының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*

***Туймазы, 2010***

*Методик хеҙмәттә Туймазы педагогия колледжының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙының рус башланғыс мәктәбендә һорау һәм хәбәр һөйләмдәр өйрәтеү буйынса методик кәңәштәре бирелә.*

Йөкмәткеһе

1. Баш һүҙ.....................................................................................................4

2. Рус башланғыс мәктәбендә һорау һәм хәбәр һөйләмдәр өйрәтеү буйынса методик кәңәштәр...........................................................................6

3. Рус һөм башҡорт телендәге һорау һөйләмдәрҙе сағыштырыу............15

4. Башланғыс синыфтарҙа синтаксик төшөнсәләрҙе өйрәтеү. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы буйынса дәрес план-конспекты..........................................................................................19

5. Рус башланғыс мәктәбендә һорау һәм хәбәр һөйләмдәр өйрәтеү буйынса дәрес өлгөләре (студенттарҙың диплом алды педагогик практикаһынан алынды)...........................................................................27

6. Файҙаланылған әҙәбиәт исемлеге............................................................37

## Баш һүҙ

Уҡытыу рус телендә барған мәктәптәрҙә башҡорт теленә өйрәтеү программаһында төп маҡсаттарҙың береһе булып балаларҙың башҡорт өндәрен дөрөҫ әйтеп, үҙ-ара һөйләшергә тәҡдим ителгән темалар һәм ситуациялар буйынса һөйләшергә, аралашырға өйрәтеү тора. Шуға ярашлы программала I синыфтан башлап һәр синыфта һөйләшеү темалары, практик үҙләштереү өсөн тел материалдары бирелә. Тимәк, башланғыс синыфтарҙа уҡ балаларҙы һорау төҙөргә һәм уға яуап ҡайтарырға өйрәтергә, артабанғы дәрестәрҙә диалог төҙөү күнекмәләрен үҫтерергә кәрәк. Был уҡытыусынан дәрестәргә әҙерләнеүҙә һәм уларҙы ойоштороуҙа махсус алымдарҙы файҙаланыуҙы талап итә. Шуға күрә был уҡытыу-методик комплексында башланғыс синыфтарҙа хәбәр һәм һорау һөйләмдәрҙе өйрәтеү, диалогик телмәр күнекмәләрен үҫтереү юлдары, алымдары, эш төрҙәре бирелә һәм буласаҡ уҡытыусылар – студенттарҙы ошо тема буйынса методик яҡтан әҙерләүҙе ойоштороу яҡтыртыла.

Тәҡдим ителгән уҡытыу-методик комплексы башҡорт телен уҡытыу методикаһы буйынса педагогия училищелар өсөн программаға һәм уға нигеҙләнеп төҙөлгән календарь-тематик планға ярашлы итеп эшләнде. Шулай уҡ башланғыс мәктәптәр өсөн сығарылған дәреслектәр, программалар, рус мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу үҙенсәлектәрен сағылдырған хеҙмәттәр ҡулланылды.

Уҡытыу-методик комплексы түбәндәгеләрҙе үҙ эсенә ала:

- рус мәктәбенең башланғыс синыфтарында һорау һәм хәбәр һөйләмдәр өйрәтеү буйынса методик кәңәштәр;
- дәрес өлгөләре;
- дәрестә ҡулланырға тәҡдим ителгән күргәҙмә материалдар ;
- башҡорт телен уҡытыу методикаһынан «Башланғыс синыфтарҙа синтаксик төшөнсәләрҙе өйрәтеү» темаһы буйынса дәрес Үуҡытыу-методик комплексы темаһына ярашлы, һорау һәм хәбәр һөйләмдәр өйрәтеү буйынса дәрес фрагменты бирелә);
- студентттарҙың үҙ аллы эштәре (дәрес план-конспекттары, доклад).

Башҡорт теле дәрестәрен эффектлы, балаларға аңлайышлы, тәрән йөкмәткеле үткәреүҙә күргәҙмә материал ҡулланыу мөһим методтарҙан һанала. Ул дәресте ҡыҙыҡлы, йәнле итеп үткәреүҙә, уҡыусыларҙың үҙ аллы эштәрен ойоштороуҙа, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереүҙә зур роль уйнай.

Рус мәктәптәрендә башҡорт теленең һорау һәм хәбәр һөйләмдәрен

өйрәнеү барышында ла күргәҙмә материалдарҙы ҡулланыу отошло. Һеҙгә тәҡдим ителгән схемалар, таблицалар һәм һүрәттәр материалды аңлап үҙләштерергә ярҙам итә, һөйләмдәрҙә һүҙҙәрҙе, ялғауҙарҙы дөрөҫ, урынлы ҡуллана белергә өйрәтә. Уларҙы яңы материал аңлатыу һәм нығытыу этабында уңышлы файҙаланып була. Схемаларҙа һүҙҙәр «______» билдәһе менән бирелә. Һөйләмдә нимә өҫтәлә йәки үҙгәрә – барыһы ла асыҡ күренә.

Бындай схемаларҙы башланғыс синыф уҡыусылары тиҙ аңлай, хәтерләй һәм оҙаҡ һайлай. Һәр схемаға ярашлы миҫалдар бирелә. Бындай күргәҙмәлекте дәрестә нисек ҡулланыу тураһында «Һорау һәм хәбәр һөйләмдәр өйрәнеү буйынса методик кәңәштәрҙә» бирелә.

Төрлө рәсем, иллюстрацияны файҙаланыу балаларҙы йәнләндерә, материалды нығыраҡ төшөнөргә ярҙам итә. Башланғыс синыфтарҙа һүрәттәр ярҙамында дәрескә уйын элементары индереү отошло. Мәҫәлән, балалар һүрәттәре геройҙар булып һөйләшәләр, һорау, бирәләр яуап ҡайтаралар, бәләгә осраған йәнлектәргә ярҙам итәләр һ.б.

## *Рус башланғыс мәктәбендә һорау һәм хәбәр һөйләмдәр өйрәтеү буйынса методик кәңәштәр*

Күп милләтле Башkортостан Республикаһында бер генә милләт йәшәгән kалалар, ауылдар юk дәрәжәһендә. Шуға күрә, башkа милли республикаларҙағы кеүек, халыkтарҙың төп аралашыу теле булып рус теле хеҙмәт итте. Бындай шарттарҙа башkорт телен өйрәнергә теләүселәр өсөн уңайлы шарттар тыуҙырылманы, балаларҙың телде өйрәнеү буйынса хоkуkтары сикләнде.

1999 йылда республикаға исем биргән төп халыkтың быуындан-быуынға күсә килгән башkорт теле, рус теле менән бер рәттән хөкүмәт теле итеп иғлан ителде. Башкорт теле, предмет буларak ү0-сы йылдарҙа уk мәктәптәргә индерелде. Башkортостан Республикаһы Халыk мәғарифы министрлығы тарафынан раҫланған программалар, дәреслектәр сығарылды. Программаны төҙөүселәр рус телле мәктәптәрҙә башkорт телен өйрәнеүҙең төп маkсаты итеп башkорт һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеп, үҙ-ара һөйләшергә, тәkдим ителгән темалар буйынса һөйләргә өйрәтеүҙе, өйҙә, йәмәғәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙалана белеүҙе kуйҙылар. Тимәк, башланғыс класс уkыусыһы тормошта ирекле темаға, ябай формала булһа ла, һөйләшә белергә, әңгәмә kорорға, икенсе төрлө әйткәндә, диалог төҙөргә тейеш.

Шуға күрә лә был хеҙмәттә рус телле мәктәптәрҙә башkорт теле уkытыуҙың актуаль мәсьәләһе - уkыусыларҙы диалогик телмәргә, һорау бирергә һәм яуап kайтарырға өйрәтеүҙе маkсат итеп kуя, методик кәңәштәр бирелә.

Диалог - ике йәки бер нисә кешенең үҙара, kапма-kаршы һөйләшеүе, фекер алышыуы ул. Диалог телмәрҙе төҙөү, уны тапшырыу, шул уk ваkытта информацияны kабул итеү, уға тейешле яуап әҙерләү процестарын берләштерә. Аралашыусыларҙың һәр береһе бер үк ваkыт эсендә тыңлаусы ла, һөйләүсе лә була ала.

Диалогик телмәр төҙөү телмәр эшмәкәрлегенең башkа формалары Үтыңлап аңларға өйрәтеү, яҙырға өйрәтеү, уkырға өйрәтеү) менән диалектик бәйләнештә тормошkа ашырыла.

Темаһы буйынса диалог күп төшөнсәләрҙе, ваkиғаларҙы үҙ эсенә ала: үҙең тураһында, ғаилә, дуҫтар, уларҙың эштәре, төрлө ваkиғалар, хәлдәр тураһында хәбәр итеү, фекер алышыу, берәй нәмә хаkында башkаларҙың фекерен белеү, кеше фекерҙәрен кире kағып, үҙ фекерҙәренде иҫбатлау һ.б.

Диалогик телмәр - ситуатив, контекстуаль, йыйнаk, алдан әҙерлекһеҙ телмәр ул. Һәр әңгәмәсенең репликаһы алдағы һорау йәки

яуаптан бойондороkло була, йәғни билдәле контекст тирәһендә туплана. Телмәрҙе әңгәмә барған ваkытта төҙөү кәрәклеге уны алдан әҙерләргә, камиллаштырырырға мөмкинлек бирмәй.

Юғарыла һаналған үҙенсәлектәрҙән сығып, диалог телмәренә өйрәтеү өсөн, түбәндәге күнекмәләрҙе булдырырға кәрәк;

ә). әңгәмәсенең һорауын тыңлау һәм аңлау;

ө) билдәле тема буйынса һорауҙар бирә белеү;

һ) һорауҙарға яуап бирә алыу;

ç) йөкмәткегә kарата үҙ фекеренде белдереү, уны иçбатлау йә кире kағыу.

Һәр төр күнекмәне булдырыу өсөн махсус күнегеүҙәр талап ителә. Был эш төрҙәре башланғыс синыфтарҙан юғарыға тиклем системалы эҙмә-эҙлекле үткәрелә.

Башланғыс синыфтарҙа уkыусылар һорау һөйләм төҙөргә, уларға яуап бирергә өйрәнергә тейеш. Бының өсөн укыусыларҙы башkорт телендә был һөйләмдәрҙең үҙенсәлектәре менән таныштырырға кәрәк.

Ниндәй ҙә булһа берәй предмет йәки хәл-ваkиға, йә булмаһа төшөнсә тураһында белергә теләү маkсат итеп kуйылған һөйләм һорау һөйләм тип атала. Башkорт телендә һорау һөйләмдәрҙең ө төрө киң таралған.

Үҙҙәренең грамматик төҙөлөштәре яғынан һөйләмдәге һорау мәғәнәһе төрлө һүҙҙәр ярҙамында белдерелә. Беренсенән, һорау мәғәнәһе һорау алмаштары арkылы аңлатыла. Конкрет һорау биреп, һөйләүсе хәл-ваkиғаның kасан, kайҙа, ни рәүешле булуын һ.б. асыkларға теләй. Миçал: Разия туkтап kалды, һүҙҙе тағы ла kайҙан башларға, нисек осларға? (Н.Кәрип "Яңы күпер") Миçалдағы **kайҙан, нисек** һорау алмаштары бүтән һүҙҙәргә kарағанда юғары интонация менән уkыла.

Икенсенән, һорау мәғәнәһе **-мы, -ме, -мо, -мө** киçәксәләре ярҙамында белдерелә. Был төр һөйләмдәрҙә, ғәҙәттә, хәл-ваkиғаның булыу-булмауын асыkлау маkсат итеп kуйыла. Миçал:

Кирәй Мәргән өйҙәме,
Кир-туры аты бәйҙәме,
Алмас kылысы kындамы,
Булат балтаһы билдәме?

(З.Биишева (Кирәй Мәргән)

ө-се төр һөйләмдәрҙә баçым һорау киçәксәләренең алдындағы ижеккә төшә, тауыш юғарылығы шул ижеккә тура килә.

Башkорт һәм рус һөйләмдәренең төҙөлөштәре төрлө. Ә рус телендә аралашkан бала рус теленә таяна, уны нигеҙ итеп ала. Шуға күрә эш барышында һорау һәм яуап һөйләмдәрҙәге оkшашлыk һәм

айырмалыkтарҙы өйрәнеү мотлаk:

ә. Һорау мәғәнәһе **-мы, -ме, -мө, -мә** киҫәксәләре аша белдерелә: Һин киноға бараһыңмы? (Ты идешь в кино?); Укытыусы килдеме? (Учитель пришел?)

Рус телендә хәбәр һөйләмде интонация ярҙамында һорау һөйләмгә әйләндереп була: День холодный. День холодный? Ә башkорт телендә һорау һөйләм киҫәксәләр аша белдерелә: Көн йылы. Көн йылымы?

2. Хәбәр һөйләмдең бер нисә төрө бар. Һорау киҫәксәләре менән белдерелгән һорау яуапта йә ризалашыуҙы, йә инkар итеүҙе талап итә. Урманға сығаһыңмы? Эйе, сығам (раҫлау). Юk, сыkмайым (инkар итеү).

Раҫлауҙы белдергән һөйләмдәр ауырлыk тыуҙырмай. Беренсенән, уларҙа һорау киҫәксәһе төшөп kала: Көн һыуыkмы? Эйе. Көн һыуыk. Икенсенән, һорау һөйләмдең эйәһе II зат исемендә килһә. I зат исеменән яуап kайтарыла (мин). Һөҙөмтәлә kылым ялғауҙары ла үҙгәрә (бараһыңмы? барам).

Был үҙенсәлек алмаш менән белдерелгән һорау һәм хәбәр һөйләмдәргә лә kағыла:

- Һин ауылға бараһыңмы?
- Эйе, барам.
- Ҡасан бараһың?
- Иртәгә барам.

3. Инkар итеүҙе белдергән яуаптарҙы хәбәргә kарап, ике төргә бүлергә мөмкин.

а) Хәбәр һөйләмдең хәбәре kылымдан килһә, kылым нигеҙенә **-ма, -мә** ялғауҙары kушыла. Ә рус телендә юkлыk **Өне**" менән бирелә. Мин бармайым. (не пойду.) Кино яратмайым. (Я не люблю кино.)

б) Һөйләмдең хәбәре башkа һүҙ төркөмөнән була, йә бөтөнләй булмай. Ул саkта ризаһыҙлыkты "түгел" мөнәсәбәт һүҙе белдерә. Фильм kыҙыkлы түгел. (Фильм неинтересный.) Был kәләм түгел. (Это не карандаш.) Көн болотло түгел. (болотһоҙ). (День безоблачный.)

4.. Һорау һөйләмдәр составында һорау алмаштары бар: Һин kайҙа бараһың? (Ты куда идешь?) Малай мәктәпкә kасан бара? (Мальчик когда идет в школу?)

Күреүебеҙсә, рус телендә лә алмаштар бар, һүҙ составы ла шул уk, тик һүҙҙәрҙең килеү тәртибе башkасараk: башkорт телендә kылым аҙаkта, ә хәл уның алдынан килә.

5. Составында һорау алмаштары булған һорау һөйләмдәргә яуап биргәндә, яуап һүҙен алмаш урынына kуйырға мөмкин:

- Һин kасан киноға бараһың?

- Мин бөгөн киноға барам.

Һорау-хәбәр һөйләмдәр тураһындағы был материалды, әлбиттә ә-ө дәрестә генә өйрәнеү мөмкин түгел. Теманы махсус өйрәнгәнгә тиклем, kайһы бер күнекмәләр булдырыла. Мәçәлән:

1. Ҡылымдарҙың зат менән үҙгәреүен яттан белеү мотлаk. Сөнки әңгәмә ваkытында бала kылым ялғауы тураһында уйлап, kаушап kалыуы бар.

2. Юkлыk мәғәнәһен белдереүсе kылымдың **(-ма, -мә)** ялғауҙарын ныkлы үҙләштереү. Мәçәлән, *ашама* kылымының *ашамайым, ашамайһың* һ.б. зат менән үҙгәреүен иçтә kалдырыу.

3. "Сифат" темаһы буйынса ла һыуыk - һыуыk түгел, сәскәле - сәскәһеҙ - сәскәле түгел кеүек формаларын белеү.

4. Сингармонизм законы менән хәбәрҙар булыу һорау киçәксәләрен өйрәнеүҙе еңелләштерәсәк. Мәçәлән, **-мы** киçәксәһе - kалын, ә **-ме** киçәксәһе нәҙек һуҙынkылы һүҙҙәргә (матурмы, сәскәме) kушылыуын аңлатkас, иғтибар һөйләм төҙөүгә йүнәлтелә.

Теманы аңлатыу һәм нығытыу өсөн тәkдим ителгән күнегеүҙәр.

Күнекмәләр әҙерлек күнегеүҙәр нигеҙендә барлыkka килә. Уkыусы алған белемде һәм формалашkан күнекмәләрҙе төрлө ситуацияларҙа kулланырға һәләтле булһын өсөн, дәрес материалы ситуатив-тематик принципkа нигеҙләнеп ойошторолорға тейеш. Дәрестә уkытыусы грамматик материалды аңлатkанда kулланған миçалдар, уkыусылар башkарған күнегеүҙәр өсөн тел материалы, һорау-яуап һөйләмдәр өсөн бирелгән текст йөкмәткеһе - бөтәһе лә билдәле бер тема буйынса булыуы мотлаk.

1. Бер тема буйынса kылымдарҙы һайлап таkтаға яҙыу. Бер нисәһенең зат менән үҙгәрешен иçkә төшөрөү.

2. Һорау һөйләмдәр төҙөү өсөн һүҙ аҙағында **-мы, -ме, -мо, -мө** киçәксәләре kуйылыуы аңлатыла һәм таkтала яҙылған kылымдар нигеҙендә тикшерелә: мин йүгерәмме? һин йүгерәһеңме? ул йүгерәме?

3. Ғәҙәти һөйләмдәрҙе һорау һөйләмдәргә әйләндереү күнегеүҙәре:

1). Балалар физзарядка яһай. - Балалар физзарядка яһаймы?

2). Улар йүгерәләр. - Улар йүгерәләрме?

4. Киçәксәләр kылым менән генә түгел, исем, сифат һ.б. һүҙ төркөмдәре менән киләләр: kыҙылмы? Бөгөнмө? Тәмлеме? Был һүҙҙәргә күҙәтеү яһала, һүрәттәр ярҙамында һорауҙар төҙөлә.

5. Әңгәмәлә.ғәҙәттә 2 кеше kатнаша. Бер кеше икенсеһенә "һин" тип өндәшә, һорау бирә, ә икенсеһе "мин" (Ізат) исеменән яуап kайтара. Түбәндәге таблица буйынса уkыусылар менән ө кешенең әңгәмәһе өсөн тура килгән kылымдар һайлау башkарыла.

1. Мин йүгерәмме?

2. Һин йүгерәһеңме?
3. Ул йүгерәме?
4. Без йүгерәбеҙме?
5. Һеҙ йүгерәһегеҙме?
6. Улар йүгеребҙме?

Был эштең һөҙөмтәһендә уkыусылар әңгәмәсегә һорау бирер өсөн II зат kылымы кәрәклеген, ә яуап биргәндә kылымдың I зат формаһын kулланыу дөрөҫ була икәнлеген аңлайҙар.

Артабан үҙҙәре һөйләмдәр төҙөйҙәр.

Мин үҙ практикамда ошондай схемалар kулланам:(Схемалар тураһында өҫтәлмә мәғлүмәтте kушымтанан kарағыҙ).

1. Һин _________ __________ һыңмы?
                                        һеңме?
2. Эйе, мин _______ _________ м.

Был төр һорауҙарға ыңғай яуап биргәндә, һөйләм тулыһынса kабатлана тиерлек. һөйләм башында "эйе" һүҙе kуйыла , ә аҙаkkы һүҙҙәге kиҫәксә төшөп kала. Уkытыусы таkтала конкрет миҫалда күрһәтә:

Бала киноға барамы?
Эйе, бала киноға бара.

Һорауҙы һәм яуапты хәтерҙә kалдырыу өсөн, ошо схемаларҙы kулланырға мөмкин:

1. _________ ___________ мы?
2. _________ ___________ .

Уkыусылар ошо схемалар буйынса үҙҙәренең һорауҙарын һәм яуаптарын төҙөйҙәр.

Алда әйтелгәнсә, диалог - ситуатив һәм әҙерлекһеҙ телмәр. Дәрестә уkыусы һөйләм төҙөү үҙенсәлектәрен аңлы рәүештә үҙләштерә. Артабан быңдай һөйләмдәр төҙөү күп тапkыр kабатланыла һәм һөҙөмтәлә бала автоматик рәүештә һорау бирергә, яуап kайтарырға өйрәнә. Быға нисек ирешергә?

Мин ошондай эш этаптарын тәkдим итәм:

1. Уkытыусы һорау, яуаптарҙы берәр һөйләмләп әйтә, уkыусылар kабатлайҙар.
2. Уkытыусы уkыусыларҙы рәт буйынса бүлә. ә-се рәт уkытыусының һорауын хор менән kабатлай, ө-се рәт - яуаптарҙы.
3. Уkытыусы хәбәр һөйләм әйтә. ә-се рәт хор менән һорау төҙөй. Яуап биреүсе рәт унан аҙаk инkар итеүҙе белдергән яуап kайтаралар. Быныһын уkытыусы алдан иҫкәртә.

4. Балалар парлап эшләй: береһе һорай, икенсеһе яуап ҡайтара.
5. Ике уҡыусы алға сыға. Уларҙың диалогын ҡалғандар тыңлай.
6. Бер уҡыусы алға сыға. Ул иптәштәренә һорау бирә, йәки киреһенсә, класташтары уға һорау бирәләр һ.б.

Бындай эш формаларын уҡыу дәрестәрендә лә ойошторорға мөмкин.

Составында һорау алмаштары булған һөйләмдәрҙе өйрәтер алдынан уҡыусылар мотлаҡ рәүештә һорау алмаштарын ятларға тейештәр. Был төр һөйләмдәрҙе өйрәнеү өсөн түбәндәге күнегеүҙәрҙе тәҡдим итәм:

1. Һөйләм эсендә һорау алмаштарының күсеү тәртибен күҙәтеү. Мәҫәлән, "Малай дәрестә уҡый" һөйләме буйынса 3 төрлө һөйләм төҙөп булыуы аңлатыла

1). Кем дәрестә уҡый?
2). Малай ҡайҙа уҡый?
3). Малай дәрестә ни эшләй?

2. "Малай дәрестә уҡый" һөйләмендә һүҙҙәр өҫтөндә ҡәләм менән һорауҙар яҙып сығыу: Малай дәрестә уҡый.

"Малай" һүҙен ябырға һәм килеп сыҡҡан һорауҙы уҡырға кәрәк: Кем дәрестә уҡый?

Ошондай уҡ эштәр ҡалған һүҙҙәр, һәм шулай уҡ башҡа һөйләмдәр менән башҡарыла.

3. Таҡтала бирелгән һүҙҙәрҙе төркөмләргә. Мәҫәлән, китап, ҡыҙ, мәктәпкә, эшләй, өйҙә, һ.б. Кем? Нимә? Ни эшләй? Һорауҙарына һүҙҙәрҙең ҡайһылары яуап ҡайтара, шуларҙы һорау аҫтына бағаналап яҙырға.

4. Сюжетлы һүрәттәр, ҡыҙыҡлы текстар буйынса уҡыусыларҙың үҙҙәренән һорауҙар төҙөтөү. һ.б

Ҡайһы бер осраҡта һорау һөйләмдәрҙән аҙаҡ бирелгән яуап тыңлаусы тарафынан әйтелмәй. Тимәк, бында һорау биреүсе үҙе үк һорауҙар ҡуя ла уларға үҙе үк яуап ҡайтара. Был төр риторик һөйләмдәр тыңлаусының йәки уҡыусының иғтибарын ылыҡтырыу өсөн хеҙмәт итә.

Йыйып әйткәндә, һорау һөйләмдәрҙәге һорау мәғәнәһен биреләү формалары тел экспрессияһының ғәжәп ҡатмарлы һәм ифрат бай булыуын күрһәтә.

Һорау һөйләмдәрҙең тәүге ике төрө башланғыс кластарҙа өйрәнелә. I кластар өсөн "Бүләк" дәреслеге менән эшләгәндә үк башлана һәм II, III, IV кластарҙа айырым параграф итеп бирелә. Тик был дәрестәрҙә генә һорау һөйләмдәр өйрәнелә тип ҡарарға ярамай, башҡа дәрестәрҙә лә текст уҡыу булһынмы, грамматик материал

өйрәнеүме, - был эш системалы, өҙлөкһөҙ алып барылырға тейеш.

Башланғыс класс уkыусылары ниндәй грамматик категориялар өйрәнмәһен, һәр ваkыт тиерлек рус теле грамматикаһы менән сағыштыралар. Ошонан сығып, башkорт теле һәм рус теле һорау һөйләмдәрен сағыштырайыk.

1. Һин киноға бараһыңмы? - Ты идешь в кино?

Беренсенән, һөйләмдә һүҙ тәртибе үҙгәрҙе, икенсенән, "бараһың" һүҙенә **-мы** киҫәксәһе kушылды. Ә рус телендә "идешь" һүҙе шул килеш kалды. Йәғни "Ты идешь в кино?" һөйләме рус әҙәби теленең нормалары буйынса, интонацияһына kарап хәбәр, өндәү, һорау һөйләм дә була ала. Ә башkорт телендә һорау киҫәксәһе kушыла, үҙенсәлекле баҫым һорау киҫәксәһе алдындағы ижеккә төшә.

2. Киноға kасан бараһың? - Когда идешь в кино?

Тәүге осраkтағы кеүек, һүҙ тәртибе икенсе төрлө, был башkорт телендә хәбәр-kылымдың гел аҙаkта йөрөүе менән аңлатыла.

Тимәк, уkыусы, башkорт телендә һорау һөйләмдәрҙе уңышлы үҙләштерһен өсөн түбәндәгеләрҙе белергә тейеш:

-хәбәр һөйләмдә һүҙ тәртибе;

-kылымдарҙың зат менән үҙгәреүе;

Һорау биргәндә, kылым II зат ялғауын kабул итә, мәҫәлән: *бараһың*, яуап биргәндә - I зат ялғауын *(барам)*. Шулай уk башkа зат ялғауҙарын да белеү мотлаk. Миҫал: Һин китап уkыйһыңмы? - Эйе, уkыйым.

-сингармонизм законы;

Әлбиттә, kылымдың зат ялғауҙарын өйрәнгәндә үк балалар һүҙҙең тамырында kалын һуҙынkы булһа, ялғауҙа ла kалын һуҙынkы икәненә төшөнәләр: *атлайҙар, киләләр.*

Был мәғлүмәт менән таныш булғанда, уkыусы kайһы осраkта -мы, ә касан -ме киҫәксәһе килгәнен тиҙ үҙләштерәсәк. Сингармонизм законы, бигерәк тә ирен гармонияһы, бер яkтан еңел тойолһа ла, рус уkыусыһы өсөн ауыр. Быны рус телендә бер һүҙҙә kалын һәм нәҙек һуҙынkылыр килеүе менән аңлатырға мөмкин.

-баланың һүҙлек запасы бай булыуы;

Составында һорау киҫәксәләре булған һорау һөйләмдәрҙе өйрәтеү этаптары:

1. Билдәле темаға kылымдарҙы һайлап таkтаға яҙыу. Бер нисәһенең зат менән үҙгәрешен иҫкә төшөрөү.

2. Һорау һөйләмдәр төҙөү өсөн башkорт телендә -мы, -ме киҫәксәләре килеүен аңлатыу. Быны kылымдар миҫалында тикшереү: мин йүгерәмме? һин йүгерәһеңме? ул йүгерәме? һ.б. (ә-се kушымтаны kарағыҙ.)

3. Ғәҙәти һөйләмдәрҙе һорау һөйләмгә әйләндереү күнегеүҙәре:
1) Балалар физзарядка яһай. - Балалар физарядка яһаймыҒ
2) Улар йүгерәләр. - Улар йүгерәләрме? Әгәр ошо һөйләмдәр бер тема буйынса була икән, укыусылар үҙ-ара һорау бирергә өйрәнәләр, был осракта, мәҫәлән, спорт тураһында: - Һин йүгерәһеңме? һ.б.
4. **-Мо, -мө** киҫәксәләре кылым менән генә түгел, исем, сифат һ.б. һүҙ төркөмдәре менән киләләр: "кыҙылмы, бөгөнмө, коромо". Был һүҙҙәргә күҙәтеү яһап, уларҙы кулланып, диалог төҙөп карау.
Составында һорау алмаштары булған һорау һөйләмдәрҙе өйрәтеү:
I. Укыусыларға һорау алмаштарын биреп ятлатыу.
II. Һорау алмаштарының килеү тәртибен күҙәтеү. Мәҫәлән: "Малай дәрестә укый" һөйләме буйынса нимә белергә теләү максатынан сығып, 3 төрлө һорау төҙөп булыуын аңлатыу:
Кем дәрестә укый?
Малай кайҙа укый?
Малай дәрестә ни эшләй?
III. Бындай һөйләмдәрҙе үҙләштереү ябайҙан ауырға барыу принцибына нигеҙләнә. Һүрәттәр күрһәтеп, ошо һүрәттәр буйынса еңел, ябай һөйләм төҙөү.
- Был нимә? (Был һорауҙы, әлбиттә, укыусы бирә)
- Был сәскә.
- Сәскә ниндәй?
- Сәскә матур.
IV. һ-ҫ һүҙҙән торған һорау һөйләмдәр өйрәтер өсөн ошондай эш төрҙәрен тәкдим итеп була:
а) "Малай аш ашамай" өйләмендә һәр һүҙ өҫтөнә һорау куйыла. Малай (кем?) аш ашай. “Малай” һүҙен ябырға. Кем аш ашай? һөйләмен балалар укыйҙар. Ошондай ук эште "аш", "ашай" һүҙҙәре менән башкарып, "Малай нимә ашай? Малай ни эшләй?" тигән һорауҙар төҙөлә. "Малай аш ни эшләй?" тбындағы һорауҙарҙы рус теле менән сағыштырып, тәржемә итеп, бындай һөйләмдәр дөрөҫ булмауын аңлатырға кәрәк (см. Пр. һ ө).
б) Һөйләмдәрҙе схема менән төҙөү:

| | | |
|---|---|---|
| Кем? | Ҡайҙа? | Ни эшләйҒ |
| Ҡыҙ | мәктәпкә | бара |
| Айгөл | өйгә | кайта һ.б. |

Был күнегеүҙе һүрәт менән эшләү ыңғай һөҙөмтәләр бирә.
в) Укыусылар бағаналап бирелгән һүҙҙәрҙе һайлап алалар һәм һөйләм төҙөйҙәр:

| | | |
|---|---|---|
| Нимә? | Ҡасан? | Ни эшләй? |
| Сәскә | үҫә | яҙғыһын |

Ғөмүмән алғанда, уkытыусы үҙ эш стиленә kарап, бындай күнегеүҙәрҙе төрләндерә ала.

Әйтергә кәрәк, был төр күнегеүҙәрҙе үткәреп, бындай эш алымдарын kулланып kына уkыусынан ирекле темаға диалог төҙөтөүҙе талап итеп булмай. Бының өсөн һәр дәрестә ғәҙәти тормошта kулланылған һорау- яуапты хор менән kабатлатыу фонетик - орфоэпик күнегеү формаһында үткәреү кәрәк һ.б., йәғни эште системалы ойоштороу ғына һәйбәт һөҙөмтәләр бирә.

Сит телен уkытыу буйынса методистар уkыусыларҙың диалогик телмәрен үҫтереү буйынса ошондай күнекмәләр тәkдим итәләр:

1. Уkытыусы һорау - яуапты берәр һөйләм әйтә, уkыусылар хор менән kабатлайҙар.

2. Балалар парлап эшләй: береһе һорай, икенсеһе яуап бирә.

3. Ике уkыусы алға сыға. Уларҙың диалогын kалғандар тыңлай.

4. Бер уkыусы алға сыға. Ултырыусыларға һорауҙар бирә һәм киреһенсә.

Методистарҙың иҫәпләүенсә, был дәрестең ун минут ваkытын ала (!), ә аң-20 һөйләм kабатлатыла.

Яуап һөйләмдәр өйрәтеү.

1. Яуап биргәндә, һорау һөйләмдә алмаш урынына яуап һүҙе kуйыла һәм яуап һөйләм төҙөлә:

Уkыусылар <u>kайҙа </u>бара?

Уkыусылар <u>экскурсияға</u> бара.

2. "Һин, һеҙ" зат алмаштары "мин, беҙ" алмаштарына, шуға ярашлы kылым ялғауҙары ла үҙгәрә.

- <u>Һин</u> kасан китә<u>һең</u>Ғ

- <u>Мин</u> иртәгә китә<u>м</u>.

3. Һорау киҫәкләре менән булған һорау һөйләмдәргә яуаптар ике төрлө kайтарыла: йә ыңғай, йә кире яуап.

а) Ыңғай яуапта һорау һөйләм тулыһынса кире kабатлана тиерлек:

- Күлдәк матурмы?

- Әйе күлдәк матур.

Тимәк, һорау киҫәксәһе төшөп kала.

- Икмәк ашайһыңмы?

- Эйе, икмәк ашайым (см. пр. 3, ç)

Кире яуаптың ике төрө бар:

а) Күлдәк матур <u>түгел.</u>

Был һөйләмдә "түгел" модаль һүҙе бар.

б) Икмәк ашамайым.

әгәр һөйләмдең хәбәре kылымдан икән - -ма, -мә юkлыk ялғауы

ҡушыла (см. пр. н)

Тимәк, инҡар итеҙе белдергән һөйләмдәрҙең дә үҙенсәлектәрен балаларға таблицалар менән күрһәтергә кәрәк.

Шулай итеп, юғары кластарҙа уҡыусының һөйләү телмәре үҫешкән булһын өсөн, башланғыс кластарҙа уҡ эште дөрөҫ ойоштороорға кәрәк. Грамматика буйынса ҡайһы бер мәғлүмәтте үҙләштергән, һорау һөйләм төҙөү буйынса күнекмәләргә эйә булған уҡыусы киләсәктә башҡортса тиҙ һөйләшергә өйрәнәсәк

## *Рус һәм башҡорт телдәрендәге һорау һөйләмдәрҙе сағыштырыу*

Рус мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙың күп үҙенсәлектәре бар. Шуларҙың береһе — рус һәм башҡорт телдәрен сағыштырып, йәнәшә ҡуйып өйрәтеү. Был, беренсенән, уҡытыусыға кәрәкле уҡыу материалын һайлап алырға, икенсенән, уҡыусыға теманы аңлы үҙләштерергә ярҙам итә. Билдәле психолог Л.В.Выготский туған телдең сит телгә өйрәтеүҙәге әһәмиәте тураһында былай ти: «Бала сит телде әсә теленән алған белемдәр нигеҙендә өйрәнә. Ләкин башҡа телде өйрәнеү — әсә теленең быҒаса билдәле булмаған үҙенсәнлектәрен өйрәтеүгә ярҙам итә.» Шулай итеп, процесс ике яҡлы була.

Ошоларҙан сығып, беҙ шундай һығымтаға килдек: һорау һәм хәбәр һөйләмдәрҙе өйрәнеү барышында уҡыусыларҙың рус теле буйынса белемдәренә таянырға кәрәк. Шуға күрә эшебеҙҙә ике телдәге һөйләмдәрҙе сағыштырып, оҡшашлыҡ һәм айырмалыҡтарҙы билдәләүҙе маҡсат итеп ҡуйҙыҡ. Был беҙгә, буласаҡ уҡытыусыларға, артабан мәктәптә һорау һәм хәбәр һөйләмдәр буйынса теманы аңлатҡанда, уҡыусыларҙың диалогик телмәрен үҫтереү өҫтөндә эшләгәндә, һәм, ғөмүмән, дәрестәргә әҙерләнгәндә кәрәкле материал буласаҡ, тип иҫәпләйбеҙ.

Рус һәм башҡорт ғилми — методик әҙәбиәттәрендә интонация буйынса һөйләм төрҙәре яҡшы өйрәнелгән. Ике телдәге һорау һәм хәбәр һөйләм конструкцияларын анализлау барышында түбәндәге үҙенсәнлектәргә иғтибар иттек.

1. Башҡорт һәм рус телдәрендә грамматик категорияларҙың оҡшаш яҡтары, хатта эквиваленттары бар.
2. Туған телдә осрамаған, ә башҡорт теленә хас тел категориялары булыуы күҙәтелә.
3. Ҡайһы бер осраҡтарҙа рус телендәге грамматик категориялар бөтөнләй башҡорт телендә осрамай.

Ә хәҙер был үҙенсәнлектәрҙе конкрет миҫалдарҙа ҡарайыҡ.

Ниндәй ҙә булһа берәй предмет йәки хәл — ваҡиға, йә булмаһа

төшөнсә тураһында белергә теләү маҡсат итеп ҡуйылған һөйләм – һорау һөйләм тип атала. Һорау һөйләм бер эш – хәл йәки ваҡиғаның үтәлеүе тураһында белеүҙе маҡсат итеп ҡуя.

Үҙҙәренең грамматик төҙөлөштәре яғынан һөйләмдәге һорау мәғәнәһе төрлө һүҙҙәр ярҙамында белдерелә.

| Башҡорт теле | ***Рус теле*** |
|---|---|
| 1.Составында һорау алмаштары булған һөйләмдәр | |
| Уҡыусы ҡайҙа бара?<br>Һин ҡасан мәктәптән өйгә<br><br>ҡайтаһың?<br><br><br>Һиңә нисә йәш? | Куда идет ученик?<br>Когда ты приходишь домой со школы?<br>Сколько тебе лет? |
| Был миҫалдарҙағы «ҡайҙа», «ҡасан», «нисә» (куда, когда, сколько) һорау алмаштары бүтән һүҙҙәргә ҡарағанда юғары интонация менән уҡыла. Күреүебеҙсә, рус телендә лә алмаштар шул уҡ. Тик һүҙҙәрҙең килеү тәртибе башҡасараҡ. | |
| 2. Интонация ярҙамында белдерелгән һорау һөйләмдәр. | |
| Уҡытыусы ҡайтҡан?<br>Әсәйең киткән?<br>Һин эшенде эшләнең?<br>Башҡорт телендә был тип һөйләмдәрҙе һирәк ишетергә мөмкин. | Учитель пришел?<br>Мама ушла?<br>Ты работу выполнил?<br>Рус телендә бындай һөйләмдәр йышырак ҡулланыла. Был һорау һөйләмдәрҙе интонация ярҙамында хәбәр һөйләмгә әйләндереп була. |
| Ошо рәүешле интонация ярҙамында белдерелгән һорау һөйләмдәрҙә тауыш күтәренкелеге аҙаҡҡы һүҙҙең ижегендә була.<br>3. Башҡорт телендә –мы –ме, -мо, -мө киҫәксәле һорау һөйләмдәр йыш осрай | |
| Уҡыусы килдеме?<br><br>Ул барамы?<br><br>Әсәйең эшләйме? Рус телендә интонация үҙгәрһә, башҡорт телендә хәбәр һөйләм аҙағындағы һүҙгә –мы, -ме киҫәксәләре | Пришел ли ученик?<br>Ученик пришел?<br>Пойдет ли он?<br>Он пойдет?<br>Мама работает? |

| | |
|---|---|
| kушыла. | |

| |
|---|
| Был hөйләмдәрҙә баҫым hорау киҫәксәләренең алдындағы ижеккә төшә, тауыш юғарылығы шул ижеккә тура килә.<br>Kайhы бер осраkтарҙа hорау hөйләмдәрҙән оҙаk бирелгән яуап<br><br>тыңлаусы тарафыннан әйтелмәй, ә hорау биреүсенең үҙенән көтөлә.<br><br>Тимәк, бында hорау биреүсе үҙе үк hорауҙар kуя ла, уларға үҙе үк яуап kайтара. Был төр риторик hөйләмдәр тыңлаусының йәки уkыусының иғтибарын ылыkтырыу әйтеләсәк уй- фекергә йәлеп итеү өсөн хеҙмәт итә. |

Йыйып әйткәндә, hорау hөйләмдәге hорау мәғәнәhенең бирелеү формалары тел экспрессияhының ғәжәп kатмарлы hәм ифрат бай булыуын күрhәтә. hорау hөйләмдәрҙән аҙаk hорау билдәhе kуйыла. hорау яуапты талап итә. Ә яуапты белдергән хәбәр hөйләмдәр ҙә үҙенсәлекле.

*Яуап hөйләмдәр.* Яуап hөйләмдә берәй нәмә тураhында хәбәр ителә. Бындай hөйләм тыныс тауыш менән әйтелә, яҙыуҙа унан hуң нөктә kуйыла. Мәҫәлән, Балалар нисек ултырҙы? — Бер нәмә лә аңламаған балалар тып — тыныс ултыра ине.

Балалар, яуап бирергә өйрәнгәндә, түбәндәгеләргә иғтибар итергә тейеш.

| Башkорт теле | Рус теле |
|---|---|
| Яуаптар.<br>1. Составында hорау алмаштары булған hорауҙарға яуап биргәндә алмаш урынына яуап hүҙе kуйыла hәм яуап hөйләм төҙөлә. Рус телендә яуап hүҙе hөйләм аҙағына kуйыла. | |
| - Айыу <u>kайҙа</u> йәшәй?<br>- Айыу <u>урманда</u> йәшәй.<br>- hин kасан уkырға өйрәндең?<br>- Мин беренсе класта уkырға өйрәндем.<br>- hиңә нисә йәш?<br>- Миңә 7 йәш. | - <u>Где</u> живет медведь?<br>- Медведь живет <u>в лесу</u>.<br>- Когда ты научился читать?<br>- Я научился читать в первом классе.<br>- Сколько тебе лет?<br>- Мне 7 лет. |

| | |
|---|---|
| 2. Составында киҫәксәләр булған һорау яуапта йә ризалашыуҙы, йә инkар итеүҙе талап итә. Ыңғай яуап kайтарғанда, һөйләм шул килеш kала тиерлек. Киҫәксәләр төшөп kала һәм ялғауҙар үҙгәрә. | |
| - һин тышkа сығаһыңмы?<br>- Эйе, мин тышkа сығам.<br>- һин уkый беләһеңме?<br>- Эйе, мин уkый беләм.<br>- Көн матурмы?<br>- Эйе, көн матур. | - Ты выйдешь на улицу?<br>- Да, я выйду на улицу.<br>- Ты умеешь читать?<br>- Да, я умею читать.<br>- День красивый?<br>- Да, день красивый. |
| 3. Инkар итеүсе яуаптар. | |
| а) - һин тышkа сығаһыңмы?<br>- Юk, мин тышkа сыkмайым.<br>- һин уkый беләһеңме?<br>- Юk, мин уkый белмәйем.<br>б) - Көн матурмы?<br>- Юk, көн матур түгел.<br>- Тышта йылымы?<br>- Юk, тышта йылы түгел.<br>- Был китапмы?<br>- Юk, был китап түгел. | а) - Ты выйдешь на улицу?<br>- Нет, я не выйду на улицу.<br>- Ты умеешь читать?<br>- Нет, я не умею читать.<br>б) - День красивый?<br>- Нет, день не красивый.<br>- На улице тепло?<br>- Нет, на улице не тепло.<br>- Это книга?<br>- Нет, это не книга. |
| а) Башkорт телендә kылым нигеҙенә юklыk аффиксы – **ма, -мә** kушыла, һөйләм башында – «юk» мөнәсәбәт һүҙе kуйыла. | а) Рус теленд1 «не» - ю6лы6ты белдерг1н яр8амсы 398 т2рк2м2н1н кил1. №2йл1м башында «нет» 398е 6уйыла. |
| б) һөйләмдең хәбәре kылым менән белдерелмәй икән (көн матур түгел) «түгел» мөнәсәбәт һүҙе kулланыла. Ошо уk һүҙ хәбәр бөтөнләй булмағанда ла kулланыла.<br>- Был ручкамы? Юk, был ручка түгел. | б) Быңдай һөйләмдәрҙә лә, йәғни хәбәре сифаттан килгәндә һәм һорау һөйләмдә хәбәр булмағанда, шул уk «не» kулланыла. |

Күреүебеҙсә, һорау һәм яуап һөйләмдәр башҡорт телендә бик үҙенсәлекле. Рус телендәге был конструкцияларға оҡшаған һәм оҡшамаған яҡтары бар.

Уҡытыусы ошо үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, уҡыусыларҙы һорау бирергә һәм яуап ҡайтарырға өйрәтә. Шул осраҡта балалар материалды аңлап, ҡыҙыҡһынып ҡабул итерҙәр, үҙләштерерҙәр тип ышанабыҙ.

## *Башланғыс синыфтарҙа синтаксик төшөнсәләрҙе өйрәтеү*

*Башҡорт телен уҡытыу методикаһы буйынса*

*дәрес план-конспекты.*

*Маҡсат*: Студенттарға башланғыс синыфтарҙа синтаксик материалды өйрәтеүҙең отошло юлдары, алымдары менән таныштырыу, методик кәңәштәр биреү.

Теоретик белемдәрен нығытыу, мәктәптә практик ҡуллана алыу һәләтлегенә ирешеү.

Студенттарҙың танып белеү күнекмәләрен, үҙ аллы эшләргә өйрәнеү активлығын, телмәр эшмәкәрлеген һәм логик фекерләүен үҫтереү.

*Йыһазландырыу*: Тема һәм план яҙылған класс таҡтаһы.

Китап, дәреслектәр, методик әҙәбиәттән төҙөлгән күргәҙмә.

Студент дәресе төшөрөлгән видеояҙма.

Синтаксис буйынса башланғыс синыфтар өсөн таблицалар һәм схемалар.

Үҙ аллы эш өсөн методик ҡулланмалар, сюжетлы һүрәттәр, дидактик материалдар.

### *Әҙерлек эштәре.*

I. Уҡытыусының әҙерләнеүе

1. Башланғыс синыфтарҙа синтаксик материалды өйрәнеү буйынса лекция әҙерләү.

2. Түбәндәге темалар буйынса сығыштар биреү һәм консультация үткәреү.

а) «Һөйләм киҫәктәре темаһы буйынса параграфтарҙа бирелгән күнегеү төрҙәре».

б) «Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр темаһы буйынса II синыфтар өсөн методик ҡулланмаға күҙәтеү».

в) «Рус һәм башҡорт телдәрендәге һорау һөйләмдәрҙе сағыштырыу».

3. Күргәҙмә әҙерләү, программа, дәреслектәрҙән кәрәкле материал табыу буйынса кәңәштәр биреү

4. III синыфта «Тамсы менән Тамсыҡай» әкиәтен уҡыу дәресе буйынса видеояҙма әҙерләү.

5. Үҙ аллы эш башҡарыу өсөн студенттарҙы төркөмдәргә бүлеү һәм уларҙы әҙерләү.

II. Студенттарҙың дәрескә әҙерлеге

1. Рус һәм башҡорт мәктәптәре өсөн программалар менән эшләү.

2. Синтаксис буйынса материалды иҫкә төшөрөү.

3. Индивидуаль сығыштар.

4. Үткән лекцион материалдарҙы иҫкә төшөрөү.

5. Башланғыс синыфтарҙа синтаксис уҡытыу буйынса кәрәкле методик әҙәбиәттән күргәҙмә әҙерләү.

| | |
|---|---|
| I. Ойоштороу моменты. | 1. |
| II. Яңы тема. | 1. |
| 1) Үтелгән темалар буйынса студенттарҙың белемен актуалләштереү. | 3. |
| 2) өй эшен тикшереү. | |
| Тема өсөн кәрәкле методик әҙәбиәт һәм программаларҙан төҙөлгән күргәҙмә нигеҙендә башлангыс синыфтарҙа синтаксис буйынса материалдың күләме һәм йөкмәткеһе тураһында сығыш яһау. | 5. |
| III. Төп өлөш. | |
| а) Уқытыусы лекцияһы «Һөйләмдең баш һәм эйәрсен киҫәктәрен өйрәнеү» | |
| б) Студенттың сығышы «Һөйләмдең киҫәктәрен өйрәнеү буйынса параграфтарҙа күнегеү төрҙәре». | 10. |
| в) Үҙ аллы эш. «Индуктив һәм дедуктив алымдар менән һөйләм киҫәктәрен өйрәтеү». | 2. |
| г) Эште тикшереү һәм баһалау. | |
| 4. а) Уҡытыусы лекцияһы. «Башҡорт мәктәптәрендә хәбәр, өндәү, һорау һөйләмдәр өйрәнеү». | 10. |
| б) Студенттың сығышы «II синыфҡа тәғәйенләнгән методик ҡулланмаға нигеҙләнеп төҙөлгән дәрес план – конспекты». Студенттар менән дәресте анализлау. | 7-8 |
| в) Үҙ аллы эш (Төркөмдәр менән эшләү) | 5. |
| 1–се төркөм дидактик материал һайлай. | |
| 2-се төркөм һөйләмдәрҙе тасуири уҡырға өйрәтеү юлдары буйынса әҙерләнә. Эштәрҙе тыңлау һәм тикшереү. | |
| 5. а) Уҡытыусы лекцияһы «Рус мәктәптәрендә һорау һәм хәбәр һөйләмдәр | |

| | |
|---|---|
| өйрәнеү».<br>б) Студент сығышы. «Рус һәм башҡорт телендәге һорау һөйләмдәрҙе сағыштырыу».<br>в) Видеофильм ҡарау «III синыфта «Ә.Хәмәтдинованың «Тамсы менән Тамсыҡай» әкиәтен уҡыу дәресендә диалогик телмәрҙе үҫтереү» (Студент Зарипова Г. дәресенән фрагмент).<br>г) Үҙ аллы эш.<br>1-се төркөм һүрәттәр ярҙамында уҡыусыларҙы һорау төҙөргә өйрәтеү юлдары әҙерләй.<br>2-се төркөм «Уҡытыусы – уҡыусы», «уҡыусы – уҡыусы» һ.б. эш формаларын ҡулланып, «Спорт» темаһы буйынса диалогик телмәрҙе үҫтереү эшен ойоштороу тураһында әҙерләнә. Эштәрҙе баһалау.<br>6. Уҡытыусы лекцияһы. «Һөйләмдә һүҙҙәр бәйләнешен өйрәнеү».<br>IV. өй эшен биреү.<br>V. Студенттарҙың эшен баһалау.<br>VI. Дәресте йомғаҡлау. | 10.<br>10<br>2.<br>3.<br>10-12<br>8-9<br>1.<br>2.<br>1. |

Дәрестең технологик картаһы.

| | Уҡытыусы эшмәкәрлеге | Студент эшмәкәрлеге | Метод | Методты дәлилләү |
|---|---|---|---|---|
| I. Ойоштороу моменты | Аудиторияның әзерлеген тикшерә | Уҡытыусыны сәләмләй | Инеш әңгәмә | Дәресте үткәрергә шарттар булдырыу |
| II. Дәрестең темаһы һәм планы турында хәбәр итеү | Тема, максаттар, план менән таныштыра | Дәфтәргә язалар | Эвристик әңгәмә | Темаға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу |
| III. Яңы теманы үҙләштәреү өсөн студентарҙың алдағы белемен тикшереү | Һорауҙар бирә | Һорауҙарға яуап бирә, дәреслектәр менән эшләй | өлөшсә эҙләнеү | Башҡорт теле һәм методика буйынса студентарҙың белемен актуалләштереү |
| IV. а) өй эшен тикшереү | Сығыш яһау буйынса кәңәштәр бирә, кәрәкле әҙәбиәт менән тәьмин итә.<br>Сығыштарға комментарий бирә. | Программалар, дәреслектәр, методик ҡулланма һәм әҙәбиәт буйынса күргәҙмә ойошторалар.<br>Рус һәм башҡорт мәктәптәре өсөн программалар нигеҙендә синтаксис буйынса материалдың күләме һәм йөкмәткеһе тураһында сығыш яһайҙар. | Практик метод Күргәҙмәлек. | Тема буйынса методик материал табыу һәм уны системаға һалыу буйынса күнекмәне формалаштырыу. |
| б) Эштәрҙе | Эштәрҙе баһалай | Һорауҙарға яуап | Әңгәмә. | Студентарҙың үҙ |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| баһалау | өҫтәлмә һорауҙар бирә. программалар буйынса дөйөмләштереү яһау | ҡайтаралар. | | эштәрен анализлауы, һығымта яһауы. |
| V. а)Уҡытыусының лекцияһы. «Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен өйрәнеү». | Теманы аңлатыу юлдары менән таныштыра, нығытыу этабы буйынса эш төрҙәрен тәҡдим итә. | Лекция яҙалар. | Лекция методы. | Информацияны аңлы ҡабул итеү. |
| б) Студенттың сығышы. «Һөйләм киҫәктәрен өйрәнеү буйынса параграфтарҙа күнегеү төрҙәре». | Эште баһалай. | Кәрәкле мәғлүмәтте дәфтәргә яҙалар. Сығыш яһаусыға һорау бирәләр. | Үҙ аллы эш.<br><br>Әңгәмә. | Студенттарға дәрескә күнегеүҙәр һайларға өйрәтеү. |
| в) Нығытыу. Үҙ аллы эш «Индуктив һәм дедуктив методтар менән һөйләм киҫәктәрен өйрәтеү». | Студентарға үҙ аллы эшләү буйынса кәңәштәр бирә, сығыш яһау формаһын аңлата. Төркөмдәргә ярҙам итә. | Төркөмдәр менән эшләү.<br>1- се төркөм индуктив методты ҡулланып,<br>2- се төркөм дедуктив метод менән теманы аңлатыу юлдары тураһында сығышҡа материал әҙерләй. | Практик методтар.. Дәреслектәр менән эшләү. | Материалды аңлы үҙләштереү. Үҙ аллы танып белеү активлығын үҫтереү. Коллективизм тойғоһон тәрбиәләү. |
| г) Тикшереү (обратная связь) | Төркөмдәрҙең эштәрен баһалай. Тема буйынса йомғаҡ яһай. | Һәр төркөмдөң сығышын тыңлайҙар, эш алымдарын сағыштыралар, бер-береһенә һорауҙар бирәләр һ.б. | Әңгәмә | Студентарҙың логик фекерләү һәләтен, телмәрен үҫтереү. иптәштәренең фекеренә иғтибарлы булырға, уларға хөрмәт менән ҡарарға өйрәтеү. |
| VI. а) Уҡытыусының лекцияһы. «Башҡорт мәктәптәрендә хәбәр, өндәү, һорау һөйләмдәр өйрәнеү». | Теманы өйрәтеү буйынса методик кәңәштәр бирә. | Лекция яҙалар. | Лекция методы. | Материалды аңлы үҙләштереү. |
| б) Студенттың | Эште баһалай. | Методик | Үҙ аллы эш. | Студенттарҙы |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| сығышы. «II – синыфkа тәғәйенләгән методик kулланмаға күҙәтеү нигеҙендә төҙөлгән дәрес план конспекты». | | kулланмалар менән эшләйҙәр. дәрес план – конспектын анализлайҙар. Әңгәмә. | | методик kулланма менән эшләргә өйрәтеү. |
| в) Нығытыу. Практик эш. | Эште башkарыу буйынса кәңәштәр бирә. Әҙәбиәт менән тәьмин итә. | Төркөмләп эшләү, 1- төркөм дидактик материал һайлай. 2-се төркөм һөйләмдәрҙе тасуири уkырға өйрәтеү юлдары буйынса әҙерләнә. | Практик методтар. | Күргәҙмә материал туплау. Суденттарҙың тасуири уkыу күнекмәләрен булдырыу. Эште ижади башkарырға өйрәтеү. |
| г) Эште тикшереү. | Уkыусыларҙың эшен тыңлай, яуаптарын тулыландыра. Төркөм – ара әңгәмәне ойоштора. | Сығыш яһайҙар. Төркөмдәр бер – береһенең эшен баһалай. Файҙалы материалды дәфтәргә яҙалар. | Әңгәмә. | Студенттарҙың фекерләү процесын активлаштырыу. Темаға kарата kыҙыkһыныу тәрбиәләү. |
| VII. а) Уkытыусы лекцияһы. «Рус мәктәптәрендә һорау һәм хәбәр һөйләмдәр өйрәнеү». | Рус мәктәптәрендә теманы өйрәнеү үҙенсәнлектәре менән таныштыра. Һораyҙар бирә. схемалар менән эш итә. | Лекция яҙалар. | Проблемалы аңлатыу. | Студенттарҙың танып белеү эшмәкәрлеген үҫтереү, уларҙы эҙләнергә мәжбүр итеү. Информацияны аңлы kабул итеү. |
| б) Студент сығышы «Рус һәм башkорт телдәрендәге һорау һөйләмдәрҙе сағыштырыу». | Эште баһалай Һораyҙар бирә. | Оkшашлыk һәм айырмалыkтарҙы дәфтәргә яҙалар | Үҙ аллы эш. Сағыштырыу | Рус һәм башkорт теле синтаксисының үҙенсәнлектәрен күрергә өйрәтеү. |
| в) Видеояҙманан дәрес фрагментын kарау. Ә.Хәмәтдиновандың «Тамсы менән Тамсыkай» әкиәтен уkыу | Видеояҙманы әҙерләй. Һораyҙар бирә. видеояҙма буйынса йомғаk яһай. | Яуап бирәләр. Дәрестә kулланылған эш төрҙәрен дәфтәргә яҙалар. | Күргәҙмәлелек<br><br>Әңгәмә. | Студенттарҙың иғтибарын үҫтереү. Теманы аңлы үҙләштереүгә булышлыk итеү. Теорияны педагогик практика менән бәйләү. |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| дәресендә диалогик телмәрҙе үҫтереү (Студент Зарипова дәресе) | | | | |
| г)Нығытыу. Практик эш. | Студенттарға эш башkарыу буйынса кәңәштәр бирә. күргәҙмә материалдар тәkдим итә. Студенттарға ярҙамлаша. | Төркөмдәр менән эш.<br>1- се төркөм темаһы – «Уkытыусы – уkыусы», «Уkыусы төркөмө- уkыусы» һ.б. эш формаһын kулланып, диалогик телмәрҙе үҫтереү».<br>2- се төркөм «Һүрәттәр файҙаланып уkыусыларҙы һорау төҙөргә өйрәтеү». | Үҙ аллы эш. өлөшсә эҙләнеү. | Теоретик белемде нығытыу һәм практик үҙләштереү, логик фекерләүҙе үҫтереү, уkыусылар менән эшләүҙә төрлө формала kулланырға өйрәтеү. |
| д) Тикшереү. | Төркөмдәрҙең эштәрен тыңлай, баһалай, тулыландыра. | Сығыш яһайҙар. Төркөмдәр бер-береһенең эшен баһалай, лекцион материалды тулыландыра. | Әңгәмә | Студенттарҙың телмәр эшмәкәрлеген активлаштырыу һәм шул нигеҙҙә телмәр үҫтереү. |
| VIII. Лекцион материал. «Һөйләмдә һүҙҙәр бәйләнешен өйрәтеү». | Теманы аңлатыу юлдары тураһында методик кәңәштәр бирә. | Уkыусылар яҙалар, һөйләмдә һүҙҙәр бәйләнешен күрһәтеүсе схема төҙөйҙәр. | Лекция методы. | Материалды аңлы kабул итеү. Һүҙбәйләнеш темаһы буйынса белемде актуалләштереү. |
| б) Лекцияны үҙләштереүҙе тикшереү | һорауҙар бирә. теманы аңларға ярҙам итә. | Яуап бирәләр. | Әңгәмә. | Теоретик белемде нығытыу. |
| IX. өй эшен биреү. | өй эштәре исемлеген тәkдим итә. | өйгә эш һайлайҙар. | Уkытыусы етәкселегендә үҙ аллы эш. | Инциативаға һәм үҙаллылыkkа әйҙәү. |
| X. Студенттарҙың эшен баһалау. | Шәхесте үҫтереүгә йүнәлтелгән мөнәсәбәт. дәрескә йомғак яһай. | Бер – береһенең һәм үҙҙәренең эштәрен баһалайҙар. | Әңгәмә. Контроль. | Уkыуға kарата kыҙыkһыныу тәрбиәләү. |
| Дәрес аҙағы. | Студенттарға хеҙмәттәшлек | Аудиторияны тәртипкә | Уkытыусы һүҙе. | Икенсе дәрескә әҙерләнеү. |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | өсөн рәхмәт әйтә. | килтерәләр. | | |

*Башҡорт мәктәптәрендә хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр өйрәнеү (Дәрес фрагменты)*

*Уҡытыусы.* Рус мәктәптәрендә башҡорт телен өйрәнеү маҡсаты – башҡортса һөйләшергә, аралашырға өйрәтеү. Ике кешенең үҙ-ара һөйләшеүе, фекер алышыуы формаһында килеүсе телмәр диалог тип атала. Диалог һорау һәм һорауға яуап булыусы хәбәр һөйләмдән тора. Шуға күрә башланғыс синыфта, ә-сенән, киң таралған һорау һәм хәбәр һөйләм конструкцияларын өйрәнеү, ө-сенән, диалогик һөйләү күнекмәһен һәр дәрестә үҫтереү өҫтөндә эшләргә кәрәк.

Ә хәҙер ошондай һөйләмдәргә күҙ һалайыҡ.

- Һин ҡайҙа йәшәйһең?

- Мин ҡалала йәшәйем.

Был һөйләмдәрҙе төҙөр өсөн уҡыусы ниндәй грамматик материалды белергә тейеш тип уйлайһығыҙ.

*Яуап.* Ҡылымдың зат менән үҙгәреүен, урын-ваҡыт килештәге исемдәрҙе, һөйләмдә һүҙ тәртибен һ.б.

*Уҡытыусы.* Тимәк, был төр һөйләмләрҙе өйрәнер өсөн уҡыусыларҙың билдәле бер темалар буйынса күнекмәләргә эйә булыу талап ителә. Улар түбәндәгеләр.

- ҡылымдарҙың зат менән үҙгәреүен белеү
- юҡлыҡ мәғәнәһен белдереүсе ҡылымдың ялғауҙарын ныҡлы үҙләштереү инҡар итеүҙе белдергән яуаптар
- сингармонизм законы менән хәбәрҙар булыу (барамы, киләме, бөгөнмө һүҙҙәрендә киҫәксәләрҙе дөрөҫ ҡулланыу).
- сифаттарҙың «түгел» һүҙе менән килеү осраҡтары менән таныш булыу (матур түгел, сәскә-һеҙ кеүек формаларҙы белеү).

Башҡорт телендә һорау һәм яуапты белдергән хәбәр һөйләмдәрҙең ҡайһы төрө киң таралған?

*Яуап.* Составында һорау алмаштары булған һорау һөйләмдәр.

–мы, -ме, -мо, -мө киҫәксәләре булған һорау һөйләмдәр.

2—се төр һорау һөйләмдәр раҫлауҙы йә инкар итеүҙе белдергән яуаптарҙы талап итә.

*Укытыусы.* Был һөйләмдәрҙе өйрәтеү өсөн түбәндәге эш алымдарҙы кулланырға мөмкин.

- Схемаларҙы кулланып, һөйләмдәрҙең төҙөлөшөн аңлатыу (схемалар буйынса һөйләү).

- өйрәнелә торған һөйләм конструкцияларын рус телендәге һөйләмдәр төҙөлөшө менән сағыштырыу

- Тел күренештәренә күҙәтеү яһау

- Нығытыу этабында күнекмәне автоматлаштырыу. «Укытыусы — класс», «Укытыусы — укыусы», «Укыусы — укыусы», «Укыусы - класс», «Класс — укыусы» эш формаларын кулланып ойошторола, кабатлатыла, үҙҙәренән билдәле бер ситуацияға һөйләмдәр төҙөтөлә.

- Укытыусы биргән һөйләмдәргә окшатып укыусыларҙың үҙҙәренән һөйләмдәр уйлатыу.

- Ситуация буйынса диалог төҙөү.

- Ҡыҙыклы, сюжетлы һүрәттәр кулланып, һорауҙар һәм уға яуаптар төҙөү.

- Дәрестә уйын формаларын кулланыу (дәрескә кунак килеү, кемгәлер ярҙам кәрәк, әкиәт сюжеты буйынса дәрес төҙөү. һ.б).

Дәресте планлаштырғанда, түбәндәгеләргә иғтибар итегеҙ:

- дәрес ситуатив-тематик принципка нигеҙләнһен

- һорау һәм хәбәр һөйләмдәр өйрәтеүҙә укыусыларҙың интонацияһына иғтибарлы булыу

- дәрестә бөтә төр телмәр эшмәкәрлектәре — тыңлау, укыу, яҙыу, һөйләү — бәйләнештә үҫтерелһен.

Теманы аңлатыу барышында беҙ рус теленә таянырға кәрәк, тип әйткән инек. Һеҙ үҙегеҙ был төр һөйләмдәрҙе сағыштырғанығыҙ бармы? Ошо һорауға яуап бирергә беҙгә Каландарова З. ярҙам итә. Ул дәрескә «Рус һәм башкорт телдәрендәге һорау һөйләмдәрҙе сағыштырыу» темаһы буйынса сығышка әҙерләнде.

(Каландарова З сығышын яһай)

Шулай итеп, ниндәй оkшашлыk, айырмалыkтарға иғтибар иттегеҙ?

(Студенттар яуап бирәләр)

Диалогик телмәрҙе үҫтереү буйынса эш уkыу дәрестәрендә лә ойоштороla. Зарипова Гөлназдың III синыфта үткәргән «Тамсы менән Тамсыkай» әкиәтен уkыу дәресендә быны күрергә була.

(Видеояҙманан дәрес-фрагментын kарау).

Зарипова Г. ниндәй эш төрҙәре kулланды? Уkыусыларҙың үҙ-ара һөйләшеүе килеп сыkтымы? Быға ни сәбәпсе? Дәрес фрагменты тураһында фекерҙәрегеҙ ниндәй?

<u>Үҙ аллы эш</u>. (Төркөмләп эшләү.)

ә–се төркөмгә эш. «Спорт» темаһы буйынса II синыфта диалогик телмәрҙе үҫтереү».Ошо маkсатта «Уkытыусы – уkыусы», «уkыусы – уkыусы» һ.б. эш формаларын kулланып дәрес фрагментын төҙөү.

ө-се төркөм «Әйҙә, танышайыk» темаһы буйынса сюжетлы һүрәттәргә-таянып, һорау бирергә, яуап kайтарырға өйрәтеү. Дәрес фрагменттарын әҙерләйҙәр.

<u>Сығыштарҙы тыңлау.</u>

Төркөмдәрҙең бер-береһен баһалауын ойоштороу.

<u>Уkытыусы тема буйынса йомғаkлау яһай.</u>

## *Рус башланғыс мәктәбендә һорау һәм хәбәр һөйләмдәр өйрәтеү буйынса дәрес өлгөләре*

### *Һорау һөйләмдәр*

1-се дәрес.

**Маkсат:** Составында һорау киҫәксәләре булған һорау һөйләм төҙөргә өйрәнеү; Диалогик һөйләү телмәрен үҫтереү; «Әсәйгә ярҙамлашам» темаһы буйынса һүҙҙәрҙе нығытыу, һөйләмдә kулланырға өйрәтеү, уkыусыларҙың логик фекерләрен үҫтереү.
**Күргәҙмәлелек:** Схемалар, һүрәттәр.

**Дәрес барышы:**

I Ойоштороу моменты.
II Өйгә эште тикшереү.

Үткән дәрестә уkыусыларға «Ярҙамлашыу» темаһы буйынса һүҙҙәрҙе kабатларға һәм ошо һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөргә kушыла. Уkытыусы өй эштәрен тикшерә һәм баһалай.

III. Фонетик-орфоэпик күнегеү.

ҮБыл күнегеү материалы итеп һорау-яуаплы һөйләмдәрҙән торған шиғырҙы алырға була).

IV. Яңы тема аңлатыу.

1. *Укытыусы:* Укыусылар, шиғырҙағы һөйләмдәр ниндәй мәғәнә белдерәләр: хәбәр итеү, өндәү, һорауҙымы?

*Укыусылар:* Һорауҙы белдерә һәм һөйләм аҙағында һорау билдәһе ķуйыла.

*Укытыусы:* Дөрөҫ, был һорау һөйләм. Бөгөнгө дәрестә беҙ башķортса ошондай һорау һөйләмдәр төҙөргә. яуап бирергә өйрәнәбеҙ.

Таķтала һөйләмдәр:

Гөлсәсәк әсәйгә ярҙамлаша. Ул иҙән һеперә. Табаķ-һауыт йыуа.

Укыусылар һөйләмдәрҙе уķыйҙар.

2. *Укытыусы:* Таķтала һөйләмдәр яҙылған. Ошо һөйләмдәрҙән хәҙер һорау төҙөйбөҙ. Беренсе һөйләмде руссаға әйләндерегеҙ һәм һорау һөйләм төҙөгөҙ.

*Укыусылар:* Гульчачак помогает маме?

Кто помогает маме? һ.б.

*Укытыусы:* Һеҙ беренсе һөйләмдә интонацияны үҙгәрттегеҙ һәм һорауһөйләм төҙөнөгөҙ. Икенсе һөйләмдәрҙә «кто», «что делает» һүҙҙәрен ķулландығыҙ. Башķорт телендә лә һөйләмдәр шулай төҙөлә. Бөгөн унын беренсе төрөн өйрәнәбеҙ.

«Гульчачак помогает маме?» һөйләме һорау интонацияһы менән уķыла. Башķорт телендә лә һөйләмдә интонация үҙгәрә, аҙаķķы һүҙенә **–мы, -ме, -мо, -мө** киҫәксәләре ķушыла. Сағыштырығыҙ: Гөлсәсәк әсәйгә ярҙам итәме: - Гульчачак помогает маме?

3. Ә хәҙер ķалған һөйләмдәрҙе төҙөйөк:

Ул иҙән һеперә-ме?

Табаķ-һауыт йыуа-мы?

Укыусылар һөйләмдәрҙе бергәләп, хор менән уķыйҙар.

4. *Укытыусы:* Балалар, нисек уйлайһығыҙ. ķасан **–мы**, ә ниндәй осраķтарҙа **–ме, -мо, -мө** киҫәксәләре яҙыла?

*Укыусылар:* Һүҙҙә ķалын һуҙынķы өндәр булһа, -мы киҫәксәһе яҙыла һ.б.

V. Нығытыу.

1. *Укытыусы:* Мин телдән һөйләмдәр әйтәм. һеҙ уларҙан һорау һөйләмдәр төҙөгөҙ.

Малай ярҙамлаша. Ул утын яра. Мал ашата. Өйгә һыу килтерә. ķыҙҙар өй йыя. Аня балаҫ таҙарта. Ата-әсә ķәнәғәт. һ.б.

2. Балалар айырым, унан аҙаķ хор менән һорау һәйләмдәр төҙөйҙәр. Укытыусы һөйләмдәрҙең интонацияһына киҫәксәләрҙең дөрөҫ ķуйылышына иғтибар итә.

3. Таķтала һөйләмдәр яҙылған:

Булат ауылда йәшәй. Ул ата-әсәгә ярҙамлаша, мал ķарай. Булат уларға бесән ашата, һыу эсерә.

Укыусылар тәүҙә телдән һорау төҙөйҙәр, аҙаķ дәфтәргә яҙып ķуялар. Күнегеү башķарылғандан һуң тикшерелә.

4. *Укытыусы:* Беҙ иптәшебеҙгә һорау бирәбеҙ, ул яуап ķайтара: йә ризалаша, йә инķар итә.

Әйҙәгеҙ, һорауға раҫлауҙы белдергән яуап бирергә өйрәнәйек.

(Таkталағы һөйләмдәргә кире kайтыу.)

-Гөлсәсәк әсәйгә ярҙамлашамы? –Эйе, Гөлсәсәк әсәйгә ярҙамлаша.

Укытыусы яуапты әйтә һәм балаларҙан һорай:

- Яуапта нимә өҫтәлде һәм нимә үҙгәрҙе?

Әлбиттә, III класс уkыусылары «эйе» һүҙе менән таныш. Улар яуапта шул һүҙҙең ә-се урынға kуйылыуын, һорау һөйләмдәге аҙаkkы һүҙгә **–ма** киҫәксәһе төшөп kалыуын әйтәләр. Ҡалған һорауҙарға яуапты уkыусылар үҙҙәре төҙөйҙәр. Укытыусы төҙөлгән һөйләмдәрҙе таkтаға, ә балалар дәфтәргә яҙалар.

5. *Укытыусы:* Һөйләмдәрҙе схема аша күрһәтәйек.

Хәбәр һөйләм схемаһы:

_________ ___________ _________ .

-Һорауҙа һөйләмгә нимә өҫтәнек?

-Аҙаkkы һүҙгә **–мы, -ме** кисәксәһен өҫтәнек.

-Һорау һөйләм схемаһы:

_______ _________ _______ мы?
ме?

-Яуапта нимә үҙгәрҙе?

-«Эйе» һүҙен алға kуйҙыk, киҫәксәләр төшөп kалды.

-Тимәк, схемабыҙ ошондай формала:

Эйе, ________ ________ _______ .

Укыусылар схеманы дәфтәргә эшләйҙәр.

6. *Укытыусы:* Хәҙер мин һеҙгә һорауҙар әйтәм, һеҙ яуап kайтарығыҙ. Укытыусы һорауҙар уkый. Балалар айырым, унан аҙаk хор менән яуап kайтаралар.

7. Укытыусы карточкалар тарата. Карточкаларҙа диалогтан өҙөктәр яҙылған. Укыусылар роллəп уkыйҙар һәм өҙөккә исем уйлайҙар.

- Һаумы, Аня!
- Һаумы, Гүзәл!
- Аня, һин бөгөн киноға бараһыңмы?
- Юk, Гүзәл. Минең өйҙә эш бар. Иҙән йыуам, өй йыйыштырам, сәй әҙерләйем. Торт бешерәм.
- Әллә бөгөн берәй байраммы?
- Эйе. Бөгөн өйҙә ҙур байрам. Әсәйҙең тыуған көнө. Беҙ уны kотлайбыҙ.
- Ә бүләк алдығыҙмы?
- Эйе, беҙ әсәйгә роза сәскәләре алдыk.

*Укытыусы:* Балалар, өҙөккә ниндәй исем бирер инегеҙ?

(Укыусылар исем уйлайҙар).

8. Диалогты роллəп уkыу.

Таkтаға һүрәттәр элелә. Һүрәттәрҙә – балаларҙың әсәйҙәренә ярҙамлашыу күренештәре.

9. *Укытыусы:* Укыусылар, ошо һүрәттәр буйынса һорауҙар уйлағыҙ һәм

иптәштәрегеҙгә әйтегеҙ. Иптәшегеҙ яуап ҡайтарһын.

Уҡыусылар парлап эшләйҙәр. Уҡытыусы һәр парҙы тыңлай, ярҙам итә. Яҡшы «әңгәмәселәрҙе» класс менән тыңлау ойошторола.

VI. Дәресте йомғаҡлау.

VII. Өй эшен биреү: һ-әр һөйләм яҙылған карточкалар таратыла. Балаларға һорау һәм яуаптарҙы төҙөргә. Дәрестә төҙөлгән схеманы ҡабатларға.

VIII. Уҡыусыларҙың эшен баһалау.

## *Һорау һөйләмдәр һәм инҡар итеүҙе белдергән яуаптар*

### *2-се дәрес*

**Дәрес маҡсаты**: 1. Һорау һөйләмдәр төҙөү буйынса күнекмәләрҙе нығытыу.
2. Инҡар итеүҙе белдергән яуап төҙөргә өйрәтеү.
3. Уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү, логик фекерләргә өйрәтеү.

**Күргәҙмәлелек**: Һүрәттәр, схемалар, таблицалар.

**Дәрес барышы.**

I Ойоштороу моменты.

II Үтелгәнде ҡабатлау һәм өй эшен тикшереү.

1. Балаларҙың өйҙә төҙөгән һөйләмдәрен тыңлау, баһалау.

2. Таҡтала үткән дәрестә төҙөлгән схемалар. Ошо схемалар нигеҙендә үтелгән теманы иҫкә төшөрөү.

*Уҡытыусы*: Башҡорт телендә һорауҙар нисек төҙөлә?

ҮУҡыусылар яуап бирәләр).

3. Уҡытыусы уҡыусыларҙы ә-се, ө-се рәткә бүлә. Үҙенең һөйләмдәр әйтәсәген, ә-се рәт һорау төҙөйәсәген, ө-се рәт яуап бирәсәген алдан иҫкәртә.

*Уҡытыусы*: Марат өйҙә эшләй.

*ә-се рәт*: Марат өйҙә эшләйме?

*ө-се рәт*: Эйе, Марат өйҙә эшләй. һ.б.

*УҡытыусыК* Минең ҡулда һөйләмдәр яҙылған карточкалар. Унда Мараттың яратҡан эштәре яҙылған. Һеҙ ниндәй һөйләм яҙылған — шуларҙы белер өсөн һорауҙар бирегеҙ. (Карточкала — Марат аш бешерә. Ул күлдәк, салбар үтекләй.)

Уҡыусылар һорау бирәләр: Марат иҙән йыуамы?
Марат табаҡ йыуамы? һ.б.

III. Яңы тема.

1. Уҡытыусы таҡтаға ике һүрәт элә. ә-се һүрәттә — таҙа, йыйыштырылған бүлмә. Уның аҫтына «Лена бүлмәһе» тип яҙылған. ө-се һүрәттә йыйылмаған бүлмә, был — «Сара бүлмәһе».

*Уҡытыусы*: Уҡыусылар, ошо һүрәттәр буйынса һөләмдәр төҙөргә кәрәк. Һөйләмдәребеҙ тулы, дөрөҫ булһын өсөн кәрәкле һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрәйек, яңы һүҙҙәр өйрәнәйек.

2. Һүҙлек эше: Таҡтала «таҙа, матур, бысраҡ, егәрле, ялҡау, йыйнаҡ, яҡты, туҙанлы, бөхтә» һүҙҙәре.

Уҡыусылар тәүге биш һүҙҙе иҫкә төшөрәләр, ҡалғандарын һүҙлеккә яҙып ҡуялар. Хор менән, айырым уҡыйҙар. һ.б.

3. *Укытыусы:* Мин һеҙгә бер бүлмә тураһында, унын хужаһы тураһында һөйләйем. Һеҙ ҡайһы һүрәттәге бүлмә тураһында һүҙ барғанлығын билдәләгеҙ.

Был ҡыҙ бик тырыш, егәрле ҡыҙ. Ул өйҙә әсәһенә гел ярҙам итә. Көн дә өйҙө йыйыштыра, туҙан һөртә, иҙәнде таҙарта. Унын бүлмәһе гел таҙа, якты, йыйнаҡ. Ҡыҙ мәктәптә лә якшы уҡый.

*Уkыусылар:* Был текст Лена тураһында. Сөнки унын бүлмәһе таҙа, бөхтә.

4. *Укытыусы:* Таkталағы ө һүрәт буйынса ла үҙегеҙ һөйләгеҙ.

Укыусылар һүрәттәр буйынса хәбәр һөләмдәр төҙөйҙәр.

Сара ялkау kыҙ. Унын бүлмәһе быcраk. Шкафтар туҙанлы. Сара өй йыймай. Әсәйгә ярҙам итмәй. һ.б.

5. *Укытыусы:* Үткән дәрестә өйрәнгән схемалар буйынса һорауҙар һәм яуаптар төҙөйөк. Лена исемле kыҙ тураһында һөйләшәйек.

Был эште бөтә синыф менән бергә йәки парҙар менән башkарырға мөмкин.

Миҫалдар:

-Лена бүлмәһе матурмы?

-Эйе, матур.

-Иҙән, шкафтар таҙамы?

-Эйе, иҙән һәм шкафтар таҙа.

-Лена өй йыйыштырамы?

-Эйе, Лена өй йыйыштыра. һ.б.

6. *Укытыусы:* Икенсе һүрәт буйынса һеҙ әйткән һорауҙарға ошондай яуаптар kайтара алабыҙмы?

-Юk, бүлмә быcраk, шкафтар туҙанлы.

-Дөрөҫ, Саранын бүлмәһе беҙгә оkшамай. Тимәк, һеҙ төҙөгән һорауҙарға ынғай яуап бирә алмайбыҙ. Беҙгә инkар итеүҙе белдергән яуаптар әйтергә өйрәнергә кәрәк.

Укытыусы һүҙлек эше өсөн бирелгән һүҙҙәр эргәһенә «түгел» һүҙен яҙа.

-«Түгел» һүҙе рус телендәге «не» һүҙенә тура килә. Тик «не» һүҙ алдынан, ә «түгел» һүҙ аҙағынан kуйыла. Шуны онотмағыҙ: «түгел» һүҙе билдәне, һанды, предметты белдергән һүҙ эргәһендә тора.

Укыусылар һүҙлек өсөн бирелгән һүҙәрҙе аҙағына «түгел» һүҙен kуйып уkыйҙар һәм тәржемә итәләр: матур түгел — некрасивый һ.б.

Уkыусылар «түгел» һүҙен һүҙлеккә яҙып kуйялар.

(«Түгел» һүҙе менән уkыусылар алдан таныш булһалар, дәрестә иҫкә төшөрәләр).

7. ө-се һүрәт буйынса уkыусылар һорау төҙөйҙәр һәм яуап бирәләр.

8. *Укытыусы:* Һеҙ ошондай һөйләмдәр төҙөнөгөҙ: Лена өй йыйыштыра. Иҙән йыуа. Ә Сара был эштәрҙе башkарамы?

*Укыусылар:* Юk, Сара эшләмәй.

Эш-хәрәкәттен башkарылмауын белдергән һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрөү маkсатында, уkытыусы шул һүҙҙәр яҙылған плакатты элә: эшлә-мә-й, таҙарт-ма-й, һ.б.

Укыусылар хор менән һүҙҙәрҙе уkыйҙар, миҫалдар килтерәләр.

9. Һорау һәм инkар итеүҙе белдергән яуап һөйләмдәрҙен схемаларын эшләү һәм дәфтәргә яҙып kуйыу:

__________ __________ __________ мы?

Юk, ________ ___________ ___________ түгел.

Юk, ________ ___________ __________ ма
мә

IV. Нығытыу.

1. Уkытыусы һорауҙар бирә. Уkыусылар айырым, аҙаk хор менән яуап бирә.

-Сара эшләйме?
-Юk, эшләмәй.
-Ул өй йыйыштырамы?
-Юk, өй йыйыштырмай.
-Сараның өйө таҙамы?
-Юk, таҙа түгел. һ.б.

2. Таkтала һорауҙар яҙылған. I рәт раçлауҙы белдергән, II рәт инkар итеүҙе белдергән яуап kайтаралар һәм дәфтәргә яҙып kуялар.

Гөлназ щи бешерәме?
Ул сәй kайнатамы?
Әсәһе уны маkтаймы?
Гөлназ егәрлеме?
Эште тикшереү.

3. Һүрәттәр таратыла. Унда Золушка һәм уның апайҙары.

*Уkытыусы:* Һеҙ Золушка һәм уның ялkау, уçал апайҙарын беләһегеҙме? Әйҙәгеҙ, иптәштәрегеҙҙең әкиәтте белеү-белмәүен тикшерегеҙ әле. Бер-берегеҙгә геройҙар һәм уларҙың өйҙәге эштәре тураһында һорауҙар бирегеҙ. Иптәштәрегеҙ яуап бирһен.

Парлап эшләү. «Уkыусы – уkыусылар» эш формаһын да kулланырға була.
Һөйләмдәре «йомшаk» сыkһа, уkытыусының ошо уk һүрәттәр буйынса әйткән һорау һәм яуаптарын балалар хор менән kабатлайҙар.

V. Дәресте йомғаkлау.

VI. Өй эше биреү: Уkыусылар үҙҙәре яратkан әкиәт геройҙары тураһында һорауҙар яҙып әҙерләйҙәр, геройҙарҙың һүрәттәрен төшөрөү.

VII. Уkыусыларҙың эшен баһалау

## *Һорау һәм хәбәр һөйләмдәр*

3-се дәрес.

**Маkсат:** Уkыусыларға был төр һорау һөйләмдәр төҙөргә һәм яуап бирергә өйрәтеү, диалогик һөйләү телмәрен үçтереү. «Мин әсәйгә ярҙам итәм» темаһы буйынса һөйләшергә өйрәтеү.

**Күргәҙмәлелек:** Схемалар, һүрәттәр.

**Дәрес барышы.**

I. Ойоштороу моменты.

II. Үтелгәнде kабатлау. Өй эшен тикшереү.

Уkыусылар үҙҙәренең һорауҙарын уkыйҙар, һүрәттәрен күрһәтәләр, kалғандар яуап kайтаралар. Уkыусыларҙың эшенә баһалар kуйыла.

III. Фонетик-орфоэпик күнегеү.

IV. Яңы тема.

Таkтала kылымдың зат менән үҙгәреүе буйынса таблица эленгән.

1. *Уkытыусы:* Беҙ бөгөн бер-беребеҙгә һорау бирергә өйрәтеүҙе дауам итәбеҙ. Ә бының өсөн kылымдарҙы һәм уларҙың ялғауҙарын иҫкә төшөрәйек. Уkыусылар таблицаны хор менән уkыйҙар. Ошо таблицаға ярашлы башkа һүҙҙәрҙең зат менән үҙгәреүен иҫкә төшөрәләр. (бешерә, әҙерләй, йыуа, һеперә һ.б.)

2. *Уkытыусы:* Ошо kылымдарҙан һорау төҙөп kарайыk.

*Уkыусылар:* Мин йыуаммы? Һин йыуаһыңмы? Ул йыуамы? Беҙ йыуабыҙмы? һ.б.

3. *Уkытыусы:* Уkыусылар, беҙ бөгөн бер-беребеҙгә kарата һорау бирергә һәм яуап kайтарырға өйрәнәбеҙ. Әйт әле, Саша, һин һөйләшкәндә Коляға кем тип өндәшәһең?

-«Һин» һүҙе менән.

-Әйт, Коля, һин кем исеменән яуап kайтараһың?

-«Мин» исеменән.

4. -Дөрөҫ. Ә хәҙер таблицаға kарайыk һәм беҙ kуллана торған һөйләмде һайлайыk.

Был эш һөҙөмтәһендә уkыусылар «Һин ярҙамлашаһыңмы?» кеүек һөйләмдәрҙе иптәшенә kарата биреп булыуын; ә яуап биреүсе «Эйе, мин ярҙамлашам» тигән формалағы һөйләм менән яуап kайтарыуын аңларға һәм үҙләштерергә тейештәр.

5. Артабан схема төҙөлә:

Һин __________ ___________һыңмы?

һеңме?

Эйе, мин ___________ ___________ м.

Яkшы уkыған уkыусылар инkар итеүҙе белдергән һөйләмдәрҙең дә схемаларын эшләргә мөмкин.

6. Уkыусылар дәфтәрҙәренә схеманы эшләйҙәр. Миҫалдарҙы яҙалар һәм аҙаk уkыйҙар.

V. Нығытыу.

1. Уkытыусы хәбәр һөйләм әйтә. I рәт һорау төҙөй, II рәт яуап бирә.

*Уkытыусы:* Һин өйҙә эшләйһең.

I рәт: Һин өйҙә эшләйһеңме?

II рәт: Эйе, мин өйҙә эшләйем. һ.б.

2. Уkыусыларға текстар таратыла. Улар үҙ аллы уkыйҙар. Ошо уk тексты магнитофондан тыңлау был төр һөйләмдәрҙең интонацияһына, паузаға, баҫымға иғтибарлы булырға өйрәтә.

3. Аҙаk тексты роллэп уkыйҙар.

-Альбина, һеҙҙең ғаиләгеҙҙә нисә кеше?

-Беҙҙең ғаиләбеҙҙә дүрт кеше: атай, әсәй, мин һәм һылыуым.

-Өйҙә әсәйеңә ярҙамлашаһыңмы?

-Әлбиттә. Минең әсәйем заводта эшләй. Өйҙә һылыуымды ҡарайым. Уны ашатам, эсерәм. Уның менән уйнайым. Табаҡ-һауыт йыуам.

-Был яҡшы. Ә мин өйҙә ҡайһы саҡ өлгөрмәйем. Миңә апайым ярҙамлаша.

*Уҡытыусы:* һеҙ ҡыҙҙарҙың һөйләшеүен тыңланығыҙ. Ә хәҙер үҙегеҙ иптәшегеҙҙең ғаиләһе тураһында һорашығыҙ. Яуаптарығыҙ ҙа дөрөҫ булһын.

3. Парлап эшләү. «Уҡыусы – уҡыусы», «Уҡыусы – класс», «Класс – уҡыусы» эш формаларын ҡулланып диалогик телмәр күнекмәләрен формалаштырыу. Баһалау.

4. Уйын. «Яҡшы һәм насар уҡыусылар». Алға ике уҡыусы сыға, уларҙың береһе – яҡшы уҡыусы, икенсеһе – насар. Уҡытыусы һорау бирә. Яҡшы уҡыусы раҫлауҙы белдергән яуапты әйтә, ә насар уҡыусы инҡар итә.

*Уҡытыусы:* һин яҡшы уҡыйһыңмы?

*Яҡшы уҡыусы:* Эйе, мин яҡшы уҡыйым.

*Насар уҡыусы:* Юҡ, мин яҡшы уҡымайым.

*Уҡытыусы:* һин өйҙә әсәйгә ярҙамлашаһыңмы? һ.б.

VI. Дәресте йомғаҡлау.

VII. Өй эшен биреү: Дәрестә телдән төҙөгән һорауҙарға өйҙә яҙып килеү.

VIII. Уҡыусыларҙың эшен баһалау

## *һорау, хәбәр һөйләмдәр темаһы буйынса нығытыу дәресе*

**Маҡсат:** һорау, яуап биреү буйынса күнекмәләрҙе үҫтереү, «Танышыу» темаһына әңгәмә ҡорорға өйрәтеү, иптәштәргә, хайуандарға иғтибарлылыҡ тәрбиәләү.

**Күргәҙмә материал:** Төлкө, ҡуян һүрәте, һөйләмдәр төҙөр өсөн һүҙҙәр яҙылған карточкалар, диалог яҙылған карточкалар, эт уйынсығы, өй һүрәте.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу моменты.

- һаумыһығыҙ!
- Кәйефтәрегеҙ нисек?
- Синыфта кем дежур?
- Бөгөнгө көн тураһында ниҙәр әйтә алаһығыҙ?

II. Фонетик-орфоэпик күнегеү.

III. Өй эшен тикшереү һәм үтелгән темалар буйынса белемде актуалләштереү өсөн уйын үткәреү.

1. *Уҡытыусы:* Бөгөн хәлегеҙҙе белешергә, һеҙҙең менән танышырға дәрескә эт

килгән.

(Уkытыусы эт уйынсығын күрһәтә, эттең исеменән уkыусыларға төрлө һораузар бирә).

- Һаумы, апай?
- Исемең нисек?
- Һиңә нисә йәш?
- Нисәнсе синыфта уkыйһың?
- Ғаиләгеззә нисә кеше? һ.б.

2. *Уkытыусы:* Уkыусылар, әйзәгез эттең үзе тураһында һорашайыk. Кем нимә белергә теләй?

(Уkыусылар һорау бирә. эт «яуап kайтара»)

IV. Төп өлөш.

1. Таkтала схемалар:

1. __________ __________ ___________ .
2. __________ __________ ___________ !
3. __________ __________ ___________ ?

- Уkыусылар, һез эткә һорау биргәндә ниндәй схемаға ярашлы һөйләм kулландығыз? (2).
- Ә яуап биргәндә? (1).
- Һорау биргәндә ниндәй һүззәр kулландығыз?
- Нимә? Ни эшләй? Нисеек? Ниндәй? һ.б.

2. *Уkытыусы:* Дөрөç. Әйзәгез был һүззәрзе хор менән kабатлайыk.

(Уkыусылар уkытыусы артынан хор менән, айырым һорау алмаштарын, ә азаk һорау һөйләмдәрен kабатлайзар).

3. Таkтаға төлкө һәм kуян һүрәттәрен элеү.

*Уkытыусы:* Мин текст уkыйым. Һез иғтибар менән тыңлағыз. Төлкө һәм kуян тураһында һорау бирәсәкһегез.

Урманда төлкө йәшәгән. Ул бик бәләкәй булған. Уның исеме – Ерәнкәй. Уға бер йәш. Уның атаһы һәм әсәһе бар. Kуян тауза йәшәй. Уның исеме Йомшаkkай. Уға бер йәш. Ғаиләһендә атаһы, әсәһе, ике ағайы бар.

4. Уkытыусы тексты ике kат уkый. Һәр партаға карточкалар тарата.

Карточкаларза һүззәр. 1-се рәткә kуян тураһында, 2-се рәткә төлкө тураһында һораузар төзөргә kуша.

Мәçәлән:

| | | |
|---|---|---|
| Kуян | kайза | йәшәй? |

| | | |
|---|---|---|
| Ҡуянға | нисә | йәш? |

(Укыусылар килеп сыkkан hөйләмдәрен дәфтәргә яҙалар. 1 hөйләмде иптәштәренә уkыйҙар. Улар яуап kайтара).

5. *Укытыусы:* Бына улар осрашkан. Улар нимә тураhында hөйләшкәнен беҙ карточкаларҙан уkыйыk.

(Диалог яҙылған карточкалар таратыла. Укыусылар роллəп уkыйҙар.)

- hаумы, төлкө!
- hаумы, kуян!
- hинең исемең нисек?
- Минем исемем Ерәнкәй. Ә hинең?
- Минем исемем Йомшаkkай.
- hин kайҙа йәшәhең?
- Мин урманда йәшәйем.
- Ә мин тауҙа. Ғаиләндә нисә төлкө?
- Беҙҙең ғаиләбеҙҙә өс төлкө.
- Әйҙә беҙгә kунаkkа.
- Әйҙә.

6. Якшы әҙерлекле укыусылар текскa таянмайынса Ерәнкәй hәм Йомшаkkай булып hөйләшәләр.

7. *Укытыусы:* Укыусылар, 1 kуян өйөнә kайтып барғанда аҙашkан. Әйҙәгеҙ ярҙам итәйек. Уның тураhында белешәйек.

Укыусылар hорау бирәләр:

- hинең исемең нисек?
- Ҡайҙа йәшәйhең?
- hиңә нисә йәш?
- Ғаиләгеҙҙә нисә kуян? h.б.

8. *Укытыусы* (өй hүрәтен күрhәтеп): Бына kуяндың өйө табылды.

Ҡуян рәхмәт әйтә hәм kайтып китә.

*Укытыусы:* Бына балалар, hөйләшә белhәң, бер-береңә ярҙам итә алаhың, иптәштәрең, таныш түгел кешеләр менән hөйләшәhең, бер ерҙә лә кәм-хур булмайhың.

V. Дәресте йомғаkлау.

VI. Укыусыларҙың эшен баhалау.

VII. Өйгә эш биреү: Таныш түгел кеше менән әңгәмә өсөн 5 hорау әҙерләргә.

## Файҙаланылған әҙәбиәт


1. Аҙиағолов Р.Ғ. һ.б. 5-9 кластарҙа башҡорт телен уҡытыу методиҡаһы – өфө, 1996.

2. Баязитов С. Актуальные проблемы национального образования.- //Ватандаш. – 2000 - №12 – С.110 – 112.

3. Бәҙретдинов В. Кала башҡорт мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу үҙенсәлектәре. - // Ватандаш – 2000 - №1 – 117 – 118-се биттәр.

4. Кәримова Г.Я. Һорау һәм хәбәр һөйләмдәр.-// Башбортостан уҡытыусыһы. – 2001.- №2.-5-се бит.

5. Уҡытыу рус телендә барған мәктәптәрҙең ә-ҫ кластары өсөн башҡорт теле һәм уҡыуҙан программалар. - өфө. - 1995.

6. Толомбаев Х.А. һ.б. Беренсе синыфтың «Бүләк» дәреслегендә методик ҡулланма- өфө. - әүүғ.

7. Уҡытыу рус телендә барған мәктәптәрҙә башҡорт теленә өйрәтеү программаһы. - өфө - әүүү.

8. Хисаметдинова Ф.Г. и др. Башкирский язык для начинающих. Уфа. - 1991.

9. Хисаметдинова Ф.Г. и др. Учим башкирский язык – Уфа. - 1997.

10. Хисаметдинова Ф.Г. Башкирский язык для маленьких, - Уфа. - 2000.

11. Хисаметдинова Ф.Г.,Ураксин З.Г. Русско – башкирский разговорник.- Уфа. - 2000.

әө. Шарапов И.Э. Урыҫ мәктәптәренең башланғыс синыфтарында башҡорт телен уҡытыу үҙенсәлектәре - өфө - 1997.

13. Әхмәҙиева Ш.Ш., Н.А. Зайцев ысулы буйынса башҡорт телендә тиҙ уҡырға өйрәнеү. - өфө. - ө000.